**VI синыфта география дәресе .**

**(6 кл. «Начальный курс географии. Т.П.Герасимова, Н П Неклюкова п.25 стр.74-75) задание 4)**

## Тема. Донъя океаны һыуының үҙенсәлектәре.

**Маҡсат.1.Уҡыусыларҙы Донъя океаны һыуыныңүҙенсәлектәре һәм уның географик киңлеккә бәйле булыуын аңлатыу.**

**2.Карта буйынса океан һәм уның өлөштәренең географик урынын билдәләү буйынса күнекмәләрен үҫтереү һәм нығытыу.**

**3.Уҡыусыларға Донъя океаны һыуын файҙаланыу һәм уны һаҡлау һаҡлау юлдары менән таныштырыу.**

**Йыһазлау. Ярымшарҙар картаһы,тоҙлолоҡ һәм температураны күрһәтеүсе таблица һәм һүрәттәр.**

## Дәрес барышы:

### I.Ойоштороу моменты.

-Һаумыһығыҙ, уҡыусылар.

-Бөгөн беҙ һеҙҙең менән Донъя океаны тура-һында белемдәребеҙҙе арттырыуҙы дауам итәсәкбеҙ.Бөтәгеҙ ҙә тырышып эшләргә, актив булырға ынтылығыҙ.

### II. Өйгә эште тикшереү.

а).Географик диктант

Таҡтала һүҙҙәр:

| | |
|---|---|
| 1.материк | 2.ярымутрау |
| 3.утрау | 4.Тымыҡ океан |
| 5.Төньяҡ Боҙло океан | 6.диңгеҙ |
| 7.ҡултыҡ | 8.боғаҙ |
| 9.Урта диңгеҙ | 10.архипелаг. |

Аңлатмалар:

-Дүрт океандың иң ҙуры

-Материктың океанға алыҫҡа инеп торған өлөшө

-Океандың бер өлөшө, унан үҙенең үҙенсәлектәре менән айырылып торған, океандан һыу аҫты утрауҙары йәки утрау менән айырылған һыу майҙаны

-Ғәйәт ҙур ҡоро ер майҙаны

-Иң бәләкәй океан
-Океандың ҡоро ергә нығ инеп торған, ләкин уның менән иркен тоташҡан урыны
-Бер-береһенә яҡын ятҡан утрауҙар төркөмө
-Ике яҡтан да материктарҙың йәки утрауҙарҙың ярҙары менән сикләнгән сағыштырмаса киң булмаған һыу аралығы.
б).Карта, атлас менән эшләү
-Кем күрһәтә?
Ҡара диңгеҙ, Урта диңгеҙ, Беринг диңгеҙе,Дрейка боғаҙы, Беринг боғаҙы, Бенгаль ҡултығы, Бискай ҡултығы, Гренландия утрауы, Ғәрәбстан ярымутрауы, Камчатка ярымутрауы.

## III.Яңы тема.

-Беҙ бөгөн һеҙҙең менән Донъя океаны һыуының үҙенсәлектәре: тоҙлолоҡ һәм температура, уның бүленеше менән танышырбыҙ.
-Һеҙҙең киноларҙа күргәнегеҙ бар диңгеҙ һыуын эсмәйҙәр. Ни өсөн?
-Дөрөҫ, сөнки тоҙло. Һыу бик яҡшы эреткес. Шуға ла үҙендә эрегән матдәләр булмаған һыу тәбиғәттә юҡ.Ҡыуып таҙартылған һыуҙы лабораторияла ғына алырға мөмкин.
Океан һыуында бик күп матдәләр эрегән.Уға әскелтем тәмде магний тоҙҙары бирә.
**1л (кг) һыуҙа эрегән матдәләрҙең грамдарҙа күрһәтелгән миҡдары һыуҙың тоҙлолоғо тип атала.**
Океан һыуының 1л уртаса 35г тоҙ эрегән.Был дәүмәлде промилдәрҙә күрһәтәләр.Ул һандың меңенсе өлөшө- промилле тип атала һәм % тамға менән билдәләнә.Тимәк, 35г = 35% .Океан һыуында иң күбе йәки 4/5 өлөшө беҙгә билдәле булған аш тоҙо менән магний тоҙҙары эрегән.Тағы ла ниндәй тоҙҙар эрегәнен үҙ-алға дәреслектән уҡыйбыҙ.
Әммә океан һыуының тоҙлолоғо бөтә ерҙә лә бер төрлө түгел. Таҡталағы таблицаны ҡарап, карта буйынса тикшерәбеҙ.

Кар диңгеҙе- 10%
Ҡара диңгеҙ- 18%
Ҡыҙыл диңгеҙ- 42%

-Ни өсөн шулай?
Донъя океаны һыуының тоҙлолоғо тышҡы шарттарға бәйле үҙгәреп тора. Кар диңгеҙенә йылғалар һәм ҡар һыуҙары күп аға, шунлыҡтан уның тоҙлолоғо аҙ. Ә Ҡыҙыл диңгеҙҙең һыуы иң тоҙлоһо, сөнки уға бер йылға ла ҡоймай, яуым-төшөм юҡ, парға әйләнеү көслө.
Тимәк,океан һыуының тоҙлолоғо океан өҫтөнән парға әйләнеүгә һәм сөсө һыуға –яуым-төшөм, ҡоро ерҙән ағып төшөүсе һыуҙарға бәйле.

Океан һыуы нык тоҙло булғанлыктан эсергә яраҡһыҙ. Океанда сөсө һыуһыҙ ҡалып,күп моряктар һәләк булған. Элек алыҫ ерҙәргә йөҙгәндә караптарҙа һәр ваҡыт сөсө һыу запасы алып сыға торған булғандар.

Хәҙер судноларҙа тоҙло һыуҙы сөсөләндергес махсус ҡоролмалар ярҙамында сөсөләндерәләр. Бындай ҡоролмалар океан яр буйҙарында урынлашҡан ҡайһы бер төбәктәрҙә лә файҙаланыла.

**Океан Ҡояштан йылылыҡ ала.** Ләкин ҡояш нурҙары һыуҙың ни бары бер нисә метр ҡалынлығындағы өҫкө ҡатлауын ғына йылыта. Был ҡатлауҙан аҫҡа йылылыҡ һыуҙың һәр ваҡыт күсеп йөрөүе арҡаһында ғына тапшырыла. 1000 метрҙан тәрәнерәк урындарҙа һыуҙың температураһы 2-3 С-тан артмай.

Температураның нисек үҙгәреүен таблица һәм карта буйынса ҡарайыҡ.

Поляр өлкәләрҙә- -1- -2 С
Уртаса райондарҙа-+20 С
Тропиктарҙа - +25 С
Экваторҙа - +28 С.

-Тимәк,өҫкө ҡатлам һыуҙың темпераураһыэкваторҙан поляр киңлектәргә табан түбәнәйә.

Океан һыуы -2 С температурала туңа.Һыу тоҙлораҡ булған һайын, уның туңыу темпетураһы түбәнерәк була.Төньяҡ Боҙло океандың үҙәк өлөшө һәр ваҡыт боҙ менән ҡапланған, Антарктиданы ла боҙ уратып алған. Ҡышын боҙ менән ҡапланған майҙан киңәйә, йәйен киреһенсә, тарая.

( Карта буйынса Төньяҡ һәм Көньяҡ ярым-шарҙарҙа йөҙөп йөрөгән боҙҙарҙың ҡышҡы таралыу сиген табабыҙ.)

## IV.Нығытыу.

-а) 3 диңгеҙҙе: Ҡыҙыл диңгеҙ, Урта диңгеҙ, Төньяҡ диңгеҙҙәрҙе тоҙлолоғо һәм температураһы арта барыу тәртибендә яҙырға.

-б) Кроссворд эшләү




1.Иң ҙур океан
2.Тоҙлолоҡтоң меңенсе өлөшө
3.Иң тоҙло һыулы диңгеҙ

Дөрөҫ яуап бирһәгеҙ океан һыуының үҙсәнлегенең беренсе ижеге килеп сыға.

-в) Карта буйынса күрһәтеү

- Иң йылы океан
- Иң тоҙло диңгеҙ
- Океан һыуының иң йылы урыны.

## V.Йомғаҡлау.

-Океан һыуының үҙсәнлектәре ниндәй?
-Улар нимәгә бәйле?
Яҡшы ҡатнашҡандарҙы билдәләү,баһалау.

## VI.Өйгә эш.

Уҡырға, һорауҙарға яуаптар әҙерләргә, 4-се эште яҙып иҫәпләргә.

